*Уҡытыусы:* Атанғолова Рәсимә Әхмәҙулла ҡыҙы,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы

# Мостай Кәрим – милләтебеҙҙең рухи йондоҙо
## Әҙәби – музыкаль кисә

**Маҡсат.** Уҡыусыларҙа тыуған еребеҙ, арҙаҡлы шәхестәребеҙ менән ғорурланыу тойғоho, М.Кәримдең үҙенә һәм ижадына ҡарата һөйөү, хөрмәт тәрбиәләү, уның әҫәрҙәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу һәм уларҙы өйрәнеүгә ынтылыш уятыу.

**Йыһазландырыу.** Зал байрамса биҙәлгән. М.Кәримдең портреты, плакаттар, шиғырҙар яҙылған стендтар ҡуйылған, әҙәби әҫәрҙәрҙән «Ҡоштар осорам» исемле күргәҙмә ойошторолған. Слайдтар күрһәтеү өсөн проектор, ноутбук, экран; аудиокассеталар.

**Кисә барышы**

**Егет.** Һаумыһығыҙ, хөрмәтле уҡыусылар, уҡытыусылар һәм ҡунаҡтар! **2019 йылдың 20 октябрендә**, Башҡортостандың халыҡ шағиры, билдәле яҙыусы, драматург **М.Кәримдең 100 йыллыҡ юбилейын** билдәләйбеҙ. Бөгөнгө әҙәби-музыкаль кисәбеҙ Мостай Кәримдең һәм Башҡортостандың 100 йыллыҡ юбилейҙарына арнала.

(Экранда М.Кәримдең портреты һәм шиғырҙарынан өҙөктәр яҙылған слайдтар

**Ҡыҙ: Ҡоштар осорам**

Ваҡ мәшәҡәт, ығы-зығы тамам,
Бар эшемдең сыҡтым осона.
Шуға күрә бөгөн таңдан алып
Күкрәгемдән ҡоштар осорам.

**Егет: Уңыштарым**

Уңыштарым егет итте мине,
Баҫалҡы ир итте һағыштар,
Әммә мине шағир яһанылар
Юғалтыуҙар менән табыштар.

**Ҡыҙ.** Эйе, Башҡортостандың халыҡ шағиры М.Кәримдең тормошо, ижади өлгөһөндә кешенең йәшәү мәғәнәһе, асылын аңлайһың. Ул үҙенең ижад ғүмерендә тыуған иле өсөн утҡа инде, уны фронтта һаҡланы. Шағир өсөн иң изге төшөнсәләр- халыҡ, хаҡлыҡ, Тыуған ил, Башҡортостан, Россия, Ватан. Бөгөн һүҙебеҙ ана шул хаҡта.

**Рус түгелмен, ләкин россиян мин.** (Йәнбирҙина Әлиә)

Рус түгелмен, ләкин россиян мин,
Россиян мин – ниндәй ғорурлыҡ!
Ун ғүмерең миңә кәрәк түгел,
Бер яҙмышым шуға торолоҡ.

**Егет.** Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим (Мостафа Сафа улы Кәримов) 1919 йылдың 20 октябрендә Башҡортостандың Шишмә районы Келәш ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ул бик

ишле ғаиләлә эш һөйөүсән һәм инсафлы бала булып үҫә. Мостафа бигерәк тә әсәһе һөйләгән әкиәттәрҙе, ҡойған йомаҡтарҙы тыңларға ярата. Иҫ киткес мауыҡтырғыс әкиәттәр уның хыялын байытырға ярҙам итәләр.

**Ҡыҙ.** Мостай Кәрим 1935 йылда үҙ ауылдарындағы ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, ике йыл Өфө педагогия рабфагында уҡый. 1937 — 1941 йылдарҙа ул — Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультеты студенты.

**Егет.** Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән, Мостай Кәрим армия сафына алына. Еңеү көнөн — 1945 йылдың 9 Майын — ул Вена ҡалаһында ҡаршылай, һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн, ул II дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары һәм миҙалдары менән бүләкләнә. (“Һалдат һәйкәле” шиғыры, Ниғәмәтова Зөлфиә һөйләй)

**Ҡыҙ.** Бөйөк Ватан һуғышынан ҡайтҡас, Мостай Кәрим ныҡлап әҙәби ижад эшенә тотона һәм йәмәғәт эштәрендә актив ҡатнаша. Ул 1951 йылдан 1962 йылға тиклем Башҡортостан яҙыусылар союзы идараһы рәйесе булып эшләй. 1962 йылдың майында ул РСФСР яҙыусылар идараһының секретары итеп һайлана.

**Егет.** 1963 йылда Мостай Кәримгә Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән ҙур исем бирелә.

**Ҡыҙ.** Мостай Кәрим 1935 — 1936 йылдарҙа яҙа башлай. 1938 йылда “Отряд ҡуҙғалды” тигән тәүге шиғырҙар китабы, 1941 йылда “Яҙғы тауыштар” тигән икенсе йыйынтығы донъяға сыға.

**Егет.** Мостай Кәрим поэзия жанры менән бергә, проза һәм драматургия жанрҙарында ла актив эшләп килә. Уның “Яңғыҙ ҡайын”, “Ҡыҙ урлау”, “Ай тотолған төндә”, “Айгөл иле”, “Салауат”, “Ташлама утты, Прометей!”, “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесы буйынса ҡуйылған “Яҙмыштарҙан уҙмыш бар” исемле пьесаларын тамашасылар яратып ҡарайҙар. Проза әҫәрҙәренән “Беҙҙең өйҙөң йәме”, “Өс таған”, “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”, “Ярлыҡау” һ. б. повестары баҫылып сыҡты.

**Ҡыҙ.** Мостай Кәримдең әҫәрҙәре башҡорт телендә генә түгел, урыҫ, татар, украин, грузин, ҡумыҡ һәм башҡа туғандаш халыҡтар телдәрендә айырым китаптар булып баҫылды, сит ил телдәренә лә тәржемә ителде.

**Егет.** М. Кәрим — Салауат Юлаев исемендәге (1967), Константин Станиславский исемендәге РСФСР дәүләт премияһы (1967) һәм СССР дәүләт премияһы лауреаты (1972), Социалистик Хеҙмәт Геройы (1979).
1940 йылдан бирле Яҙыусылар союзы ағзаһы ине.

**Ҡыҙ.** Мостай Кәрим исемен Башҡортостан республикаһының Милли йәштәр театры йөрөтә. Мостай Кәримгә Өфө ҡалаһының Профсоюздар йорто алдында 2013 йылдың 10 октябрендә һәйкәл ҡуйылды.

**Егет.** Быйыл Өфө аэропортына уның исеме бирелде. Яҙыусының “Беҙҙең өйҙөң йәме” повесы буйынса “Сестренка” исемле художестволы фильм төшөрөлдө.

**Ҡыҙ.** «Донъяла бер көс бар — ул йыр. Йыр кешеләге бөтә тойғоларҙы үҙ эсенә ала һәм уларҙы үҙ ихтыярына буйһондора»,-тип яҙа шағир. М.Кәрим күп шиғырҙарын үҙе үк йыр тип атай. (Смирнова Ильвина башҡарыуында “Сигеү сигә ҡыҙҙар” йыры)

**Егет.** М.Кәрим “Ҡайын япрағы тураһында” шиғырында Башҡортостан менән Россияның дуҫлығының ҡара көстәрҙең еңә алмаҫлыҡ бөйөклөгөн тасуирлай. Шиғырҙарҙың эстәлеге, яңғырашы шул тиклем матур, шуға күрә шиғырға көй ҙә яҙылған.

“Ҡайын япрағы тураһында” шиғырын һөйләү (Байдәүләтова Азалия, Ғимранов Айтуған, Мансуров Илгиз).

**Ҡыҙ:** Башҡортостандың халыҡ шағиры, Станиславский исемендәге РСФСР Дәүләт премияһы, Салауат Юлаев исемендәге Республика премияһы лауреаты, Социалистик хеҙмәт геройы, Андерсен исемендәге Халыҡ- ара Почетлы диплом менән бүләкләнеүсе оҙон һәм бай ғүмер юлы уҙған шағирыбыҙ “Уңдым” шиғырында былай тип яҙҙы.

**Егет:** Мостай Кәрим үҙенең “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесында былай тип яҙа: “Шулай, дуҫтар, яҙмыш менән бәхәсләшеп, беҙ үҫә барҙыҡ. Буйға еттек. Һабаҡ алырға ла ваҡыт етте. Һөйөклө Оло инәйем мине мөғәллимәгә алып барып тапшырҙы. Ғазаплы һәм серле мәктәп йылдары, белем һуҡмаҡтары минең йөрәгемдә уҡытыусыма ҡарата йыр булып яралды”. Ысынлап та М.Кәрим барыбыҙ өсөн дә уҡытыусы булды. Айрат Ҡобағошов музыкаһы М.Кәрим һүҙҙәренә бергәләп «Уҡытыусыма» йырын тыңлайыҡ, дуҫтар.
(Тимеров Арслан йырлай)

**Ҡыҙ:** Ошоноң менән Башҡортостанды һәм Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең 100 йыллығына арнап үткәрелгән кисә тамам.

**Егет:**Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт! Әҙәби-музыкаль композициябыҙҙы шағирҙың “Ҡайын япрағы тураһында” шиғырынан өҙөк һөйләп, флешмоб менән тамамлайбыҙ!